


Билдәле эшҡыуар, йәмәғәт эшмәкәре, «Урал» башҡорт халыҡ үҙәге етәксеһе Риф Шәрифрахман улы Иҫәнов киләһе 2019 йылға «Йәншишмә» гәзитенә стена календарын эшләтте.

3 мең тираж менән сығарылған сағыу йылъяҙманы әҙерләүгә «Урал» ойошмаһы етәксеһенең урынбаҫары Нияз Мәһәҙиев, журналист Азамат Мәһәҙиев, гәзитебеҙҙең ветераны Зөһрә Ҡотлогилдина, фотохәбәрсе Игорь Киняпин, рәссам-дизайнер Рөстәм Илтенбаевтар ҙур тырышлыҡ һалды. Рәхмәт уларға.

Башҡортостандың 100 йыллығына арнап сығарылған был иҫтәлекле календарь менән гәзитебеҙҙең иң яҡын дуҫтары, «Йәншишмә» үткәргән төрлө сараларҙа, осрашыуҙарҙа ҡатнашыусылар бүләкләнәсәк.

## Ун беренселәр йомғаҡлау иншаһы яҙҙы

Республикабыҙҙың 18 меңдән ашыу сығарылыш синыф уҡыусылары БДИ-ға инеү хоҡуғын биргән йомғаҡлау иншаһы буйынса һынау тотто. Шуларҙың 67-һе – һаулығы буйынса мөмкинлеге сикле балалар, 370-тән күберәге – колония уҡыусылары, 440-ҡа яҡыны изложение яҙҙы. Ижади эште үтәү өсөн 3 сәғәт 55 минут тирәһе ваҡыт бирелде. Күләме 350 һүҙ тирәһе булырға тейеш. Үҙ аллы яҙыу талаптарын үтәү, һайлаған теманы асыу, фекерҙе раҫлай һәм әҙәби материалды нигеҙле ҡуллана белеү иҫәпкә алына. Эште башҡара алмағандар киләһе йылдың 6 февралендә йәки 8 майында уны ҡабаттан яҙа икән.

Был юлы «Аҙна һайын – отош» уйынында бүләк **Аделина Дауытоваға** сыҡты. Сынаяҡтар йыйылмаһы **Салауат районының Юныс ауылына** юлланасаҡ. Аделина, һине ҡотлайбыҙ!



**Гәзиткә ярты йылға яҙылыу хаҡы – 490 һум 44 тин. Индексы – П2765.**
**Бер йылға яҙылып та була. Хаҡы – 894 һум 29 тин. Индексы – П3371.**

***«Йәншишмә»гә – синыф менән!»***

## «Берәү – бөтәһе өсөн, бөтәһе – берәү өсөн»

Ошондай девиз менән эшләйбеҙ беҙ. Төрлө ауылдарҙан йыйылһаҡ та, бик дуҫ, татыу йәшәйбеҙ. Берберебеҙгә һәр саҡ ярҙам ҡулы һуҙабыҙ. Уҡытыусыбыҙ Дилара Миннулла ҡыҙы Батраева менән мәктәп, район кимәлендә үткән төрлө конкурстарҙа ҡатнашабыҙ, призлы урындар яулайбыҙ.

Бәләкәй булһаҡ та, уҡыуҙың кәрәклеген яҡшы аңлайбыҙ, бар көсөбөҙҙө һалып, киләсәктә илебеҙ өсөн кәрәкле кешеләр булып үҫергә теләйбеҙ.

***II СИНЫФ УҠЫУСЫЛАРЫ.***
*Бишбүләк районы, Ҡаныҡай мәктәбе.*

